**Йомаҡтар**

Тажы бар – батша,
Тажын һалдырһаң,
Өзләп илата.
Йырлап йыуата.
Зарыңды һорай,
Ул моңло (ҡурай).

Ишек төбөндә
Һағалап тора,
Тәҙрә егенән
Ул тынын өрә,
Тышта ла миңә
Эйәреп йөрөй,
Толомдо һүтә,
Шаяра юрый,
Ҡулы күренмәй,
Ә һин уйлай бел:
Йәшенеп кенә
Шулай уйнай (ел).

Бәләкәс кенә үҙе,
Сыҡҡан булған мөгөҙө,
Уйнап туймай тәгәрләс,
Дүрт аяҡлы тәгәрмәс?
Күргәнем бар, ул – (бәрәс).

Ай ҡыҙының көйәнтәһе
Еленгән күктә, йә күр!
Ете төҫкә буялған,
Көйәнтә,тиһәм – (йәйғор).

Ҡыйыҡта кем ул, ни ул:
Тып – тып, тап – тап,
Ҡыйыҡ ҡалайы ҡапылдай,
Ҡып –ҡып,ҡап –ҡап.
Ҡыйыҡта кем ул, ни ул:
Шуҡ –шуҡ,туҡ –туҡ,
Унан да оҫта бейеүсе
Юҡ-юҡ,юҡ -юҡ.
Ҡыйыҡта кем ул, ни ул:

Тағыр -тоғор?
Ҡыйыҡ ҡалайы  ҡарышмай:
Яуғыр, (ямғыр).

Әсәй әйтә бер йомаҡ:
Йомшаҡ ҡына, тумалаҡ,
Аҡ мейескә инеп ята
Йомро-йомро йомарлаҡ.
Беләбеҙ бит, әсәкәй!
Беҙ итәбеҙ сәпәкәй:
Йомро-йомро йомарлаҡ
Ул ҡәҙерле (әпәкәй).

Күл ситенә сәнселгән,
Әллә инде сәселгән?
Йәшел хәнйәр күргәндәр –
Үткер ҡырлы (күрәндәр).

Мин һине беләм,тигәйнем,
Мин һине беләм,ти,
Һәр һүҙемде ҡабатлай,
Гүйә эргәмдән атлай...
Тауҙа шаңҡый – даумы –дау,
Тауышы шаңлы (шаңдау).